


**Мөхтәрәм милләттәштәр, диндәштәр, туғандар!**

Һәммәгеҙҙе Башҡортостандың изге урындары – әүлиәләр зыяраттары, изге шишмәләр, Башҡортостандың күркәм мәсеттәре буйлап дини сәфәргә саҡырабыҙ. Иншалаһ, Аллаһ ризалығы өсөн ойошторолған дини байрамыбыҙға милләттәштәребеҙҙең, диндәштәребеҙҙең саҡырыуын ихлас ҡабул итеп, бөтөн донъяға билдәле ғалим Мәүләнә Солтан Әүлиә Шәйех Мехмет хәҙрәттәренең тағы ла Башҡортостанға килеүе көтөлә. Ул 1 майҙан 4 майға тиклем Башҡортостанда мосолмандар менән осрашасаҡ. Мәсеттәребеҙҙә беҙҙең менән намаҙға баҫып, әүлиәләребеҙ мәҡәмдәренә зыярат ҡылып, Аллаһ ризалығына аят-сүрәләр, илебеҙгә, еребеҙгә, халҡыбыҙға бәрәкәт килһен, милләтебеҙ иманын нығытһын өсөн, республикабыҙҙа, Рәсәйҙә, бөтөн донъяла тыныслыҡҡа һәм именлеккә доғалар уҡыясаҡ. Солтан Әүлиәнең доғалары аша, шаһит булып киткән ата-бабаларыбыҙ, бөйөк әүлиәләребеҙ хөрмәтенән, Аллаһы Тәғәлә беҙгә Үҙенең сикһеҙ фатихаларын бирһен, рәхмәттәрен яуҙырһын. Иман сәфәренә рәхим итегеҙ.

**Сәйәхәтебеҙ түбәндәгесә:**

**1 май**

**13-00** - Мәүләнә Солтан Әүлиә Шәйех Мехмет хәҙрәттәренең Рәсәйҙең Юғары мөфтөйө Шәйех-әл-ислам Тәлғәт Таджуддин менән Нарыҫтауҙа Сәхәбәләр мәсетендә йома намаҙы, сөхбәт, пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд (с.ғ.с) сәхәбәләре Зәйет улы Зөбәйер, Зөбәйер улы Абдрахмандың мәҡәменә зыярат.

**17-00** – Ярыштауҙа Әүлиә мәҡәменә зыярат. (Дәүләкән районы, Дүрөйлө ауылы).

**20-50** – Өфөләге беренсе йәмиғ мәсетендә аҡшам намаҙы, сөхбәт. (Туҡай урамы, 48).

**2 май**

**10-00** – Асҡын районына сәфәр.

**13-30** – Асҡын ауылы мәсетендә намаҙ, сөхбәт.

**18-25** – Асҡын районы Иҫке Ҡаҙансы ауылы мәсетендә намаҙ, сөхбәт.

**3 май**

**12-00** – Ғарифулла Кейеков ишандың мәҡәменә зыярат, изге шишмә янында мосолмандар менән осрашыу, сөхбәт. (Тәтешле районы, Иҫке Күрҙем ауылы).

**15-00 –** Ғәли Соҡорой ишандың мәҡәменә зыярат (Тәтешле районы Иҫке Соҡор ауылы).

**21-00** – Өфөләге Ләлә-Тюльпан мәсетендә аҡшам намаҙы, сөхбәт.